Бөрйән районы үҙәкләштерелгән китапханалар системаһы
Тимер ауыл китапханаһы

Бөйөк Еңеүҙең 75йыллығына арналған

***«Бөйөк Ватан һуғышы минең ғаиләм тарихында»***

район мультимедиа презентациялар конкурсына

# ***«Мәңге йөрәк түрендә»***

***Авторы:*** *Билалова Гөлиә Ғәҙел ҡыҙы, 11 йәш*

***Етәксеһе:*** *Тимер ауыл китапханасыһы*
*Үлмәҫбаева Гөлүзә Вәзир ҡыҙы*

# Бөйөк Еңеүгә 75 йыл

***Еңеү көнө...***

***Европаның күген***

***Ҡоштар иңләп шомһоҙ осҡан көн.***

***Яралары һулҡылдаған ерҙе***

***Май ҡояшы ҡурсып ҡосҡан көн...***

**1418 көн һәм төн дауам иткән һуғышта тотош ил буйынса 27 миллион ҡорбан,1710 ҡала, 70 меңдән артыҡ ауыл яндырыла. Беҙҙең Башҡортостандан һуғышта 700 меңдән ашыу яугир ҡатнашып,шуларҙың 300 меңдән ашыуы яу яланында ятып ҡала. Бөрйән районы Тимер ауылынан да бөтәһе 120 кеше һуғышта ҡатнаша. Улар араһында Алтынбаев Фәтхулла Йәғәфәр улы ла бар.**



Ҡартатайым Алтынбаев Фәтхулла Йәғәфәр улы Тимер ауылында 1919 йылдың 1 майында тыуған. Унның бала сағы бик ауыр үткән. Тап шул осорға ауыл хужалығын коллективлаштырыу ваҡыты тура килә. Йәғәфәр Алтынбаевтың колхозға тип барлыҡ мөлкәте, шул иҫәптән һуңғы тауығына тиклем тартып алына. Ә Фәтхулла Йәғәфәр улы бәләкәйҙән колхозда бил бөгә.





1939 йыл Фәтхулла Йәғәфәр улы үҙ теләге менән Ҡыҙыл Армия сафына яҙыла. Алыҫ Көнсығышта пулеметчик булып хеҙмәт итә. Һуғыш башланыу менән фронтҡа эләгә.

**1941 йылдың 30 сентябрендә Волхов фронтында алышҡан Фәтхулла Йәғәфәр улына Мәскәү ҡалаһы өсөн ҡаты һуғыштарҙа ҡатнашырға тура килә. Ҡышҡы һыуыҡтарҙа бик күп һалдаттар ауырыуҙан һәләк булалар. Фәтхулла Йәғәфәр улы ла госпитальгә эләгә һәм ярты йылдан тыуған яғына ҡайтарыла.**



1943 йылдың яҙында ауылдан 5 ир-егетте НКВД саҡыртып ала. Уларҙы Советтар Союзына ҡаршы пропагандалауҙа һәм фашистарға ярҙам итеүҙә ғәйепләп Ҡаҙағстанға холоҡ төҙәтеү лагерына ебәрәләр. Колонияла 10 йыл буйына баҡыр руднигында ла, көтөүсе лә булып эшләй. Унан һуң 2 йыл БАССР-ҙан ситтә йөрөгәндән һуң, ауылына ҡайта.





Фәтхулла Йәғәфәр улы оҙаҡ йылдар лесник булып эшләп хаҡлы ялға сыға. Ул ҡатыны (беҙҙең оло өләсәйебеҙ) менән 7 балаға ғүмер бүләк итәләр. Уның әлеге көндә 22 ейән-ейәнсәре, 44 бүләсәре бар.



Ҡартатайым Сажиҙә картәсәй, Әмир һәм Нәҙир ағайҙар менән



**Фәтхулла ҡартатайым иң кесе улы Нәҙир**
**һәм уның ғаиләһе менән**



**Хакимиәт башлығынан Еңеү көнө уңайынан ҡотлау ҡабул итә**



**Ҡазан ҡалаһында курортта**

## Ветерандар менән иҫтәлеккә



# Олатайым миҙалдары...











***Фәтхулла Йәғәфәр улы Бөйөк Ватан һуғышы ветраны, репрессия ҡорбаны 2009 йылдың 7 июнендә вафат була. Уның һәм яҡты киләсәк өсөн һәләк булған башҡа һалдаттарҙың батырлығын, ҡыйыулығын беҙ онотманыҡ.***







***Беҙ – тереләр, үлгәндәрҙең***
***Аманатын онотмайыҡ:***
***Һис ваҡытта ерҙе уттан***
***Үртәтергә юл ҡуймайыҡ!***
***Юл ҡуймайыҡ!***

**Бөйөк Ватан һуғышының дәһшәтле һәм фәжиғәле көндәре йылдан-йыл йыраҡлаша бара. Ләкин халҡыбыҙ кисергән ул ҡайғы-хәсрәттәр бер ҡасанда онотолмаҫ. Миллиондарса ғаиләләр өсөн һуғышта һәләк булған, хәбәрһеҙ юғалғандарҙың яҙмышы әле лә билдәһеҙ.**








Һуғыштар булмай
ҡорбанһыҙ.
Унһыҙ – юҡ Еңеү туйы.
Ә беҙ үлгәндәр алдында
Бурыслы ғүмер буйы

Төҙәлә инде, төҙәлә
Ил тәнендәге яра.
Еңеүселәр һаны ғына
Йылдан - йыл кәмей бара.
Ҡырҡ биштең яҙ башына
Йыраҡайһа ла ара,
Еңеү көнөнөң ҡәҙере
Кәмемәй , арта бара.




Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!